# Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһының эшен сағылдырған документация исемлеге

I папка – норматив документтар, РФ һәм БР Закондары тупланмаһы (РФ һәм БР «Мәғариф тураһында»ғы Закондары, «БР халыҡтары телдәре тураһында»ғы, «РФ халыҡтары телдәре тураһында»ғы Закондар) һ.б.

II папка – кабинеттың паспорты, кабинеттың эш планы;

- «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинетына берҙәм талаптар» (Башҡортостан уҡытыусыһы, №12, 2006 йыл);

- кабинет мөдирен тәғәйенләү тураһында приказ;

- кабинеттың уҡыу йылына әҙерлеген белдереүсе акт;

- хәүефһеҙлек инструктажы журналы.

III папка – календарь-тематик пландар.Календарь-тематик пландар һәр класҡа, башҡорт теленән айырым, әҙәбиәтенән айырым төҙөлә.

IV папка – көндәлек дәрес пландары.Планда датаны, дәрес йыһаздарын күрһәтеү, өс маҡсатты, структураһын билдәләү мотлаҡ булып тора. Индивидуаль эшкә лә ваҡыт бүленергә тейеш.

V папка – уҡытыусының фәнни-методик папкаһы:

- уҡытыусының педагогик концепцияһы;

- перспектив үҫеш планы;

- алдынғы тәжрибәне өйрәнеү, йомғаҡлау һәм уны таратыу тураһындағы материалдар;

- методик тема өҫтөндә эш (уҡытыусының сығыштары, мәҡәләләре, методик рекомендациялары, авторлыҡ программалары һ.б.)

- уҡыусылар менән берлектә башҡарылған фәнни-эҙләнеү эштәре.

VI папка – уҡытыусының портфолиоһы:

- уҡытыусы тураһында белешмә;

- эш һөҙөмтәһенең үҫеш динамикаһы: олимпиадалар, административ контроль эштәр һөҙөмтәһе, сығарылыш уҡыусыларының урта махсус һәм юғары уҡыу йорттарына инеүе тураһында мәғлүмәт, мәктәп, зона, район һәм республика конкурстары һөҙөмтәләре;

- маҡтау грамоталары, рәхмәт хаттары, дипломдарҙың ксерокопиялары;

- үткәрелгән сараларға анализ яһау белешмәләре, сара йомғаҡтары буйынса приказдар;

- еңеүселәрҙең, призерҙарҙың фотографиялары, үткәрелгән сараларҙың иҫтәлеккә төшөрөлгән фотолары.

VII папка – уҡыусыларҙың ижади эштәре:

- иң һәйбәт яҙылған иншалар;

- Урал батырға, М.Аҡмуллаға, Туған илгә, юбилейҙарға арналған шиғырҙар, ҡобайырҙар һ.б.

- шәжәрә төҙөү, шәжәрә байрамдарына арналған сценарийҙар һ.б.

- уҡыусыларҙың фәнни-эҙләнеү эштәре.

VIII папка – иң яҡшы дәрес өлгөләре, сценарийҙар.

IX папка – уҡыу-уҡытыуға берҙәм талаптар:

- уҡыусының дәфтәр тотошона берҙәм талаптар;

- контроль һәм яҙма эштәрҙе тикшереүгә берҙәм талаптар;

- уҡыусының уҡыу тиҙлеген тикшереүгә берҙәм талаптар.

X папка – һәләтле һәм йомшаҡ уҡыусы балалар менән эш:

- уҡыусыны олимпиадаға әҙерләү планы һәм графигы;

- йомшаҡ уҡыусы бала менән эшләү планы;

- «Урал батыр» эпосы буйынса йәш сәсәндәр бәйгеһенә, «Аҡмулла вариҫтары», Башҡортостан Республикаһы көнөнә арналған ижади конкурсҡа әҙерлек планы.

XI папка – мәктәп методик берекмәһе эше:

- методик берекмәнең эш планы;

- ултырыштар протоколдары;

- алдынғы тәжрибәне йомғаҡлау һәм уны таратыу материалдары.

## Портфолио

Борон-борондан уҡытыусы уҡыусынан күберәк белә тигән фекер йәшәп килә. Ләкин яңы үҫеш, тиҙләнеш заманында уҡытыусыға был баһаны төшөрмәү өсөн, бик көсөргәнешле эшләргә тура килә. Ошондай көсөргәнеш булмаһын өсөн уҡытыусыға үҙ эшен теүәл иҫәп менән алып барыу мөһим. Әлбиттә, эште теүәл төҙөлгән план буйынса башҡарыу һәм үтәлгән һәр эшкә анализ яһау һөҙөмтәле эшләргә ярҙам итә.

Шәхси портфолио булдырыу һәр уҡытыусының ҡулынан килерлек эш. Әммә ул айырым иғтибар, ваҡыт һәм йыйнаҡлыҡ талап итә.

Портфолиоға материал туплауға яңы уҡыу йылы башынан уҡ тотоноу маҡсатҡа ярашлы булыр. Эшкә тотонор алдынан түбәндәге тәҡдимдәрҙе иҫәпкә алыу мотлаҡ:

- башта уҡ унда нимәләр теркәлергә тейешлеген асыҡларға кәрәк

- портфолиоға инәсәк материалды бәләкәй йәшниккә, йәки бәйләнмәле папкаға йыйыу ҡулайлы буласаҡ

- ай һайын йыйылған материалды ҡарап, тейешле анализ һәм һығымталар яһап, үҙегеҙҙең нимәләргә өлгәшеүегеҙҙе барлап барыу маҡсатҡа ярашлы буласаҡ. Быны уҡыу йылы аҙағына ҡалдырырға ярамай

- портфолионы тиҙ тегелмәле папкаға туплау уңайлы

- теләгән ваҡытта кәрәкле бүлекте табып, кәрәкле материалды ҡулланырлыҡ булһын өсөн тәүге биттә йөкмәткене күрһәтергә, яңы материалды теркәп барыу өсөн урын ҡалдырырға кәрәк.

Портфолиола нимәләр булырға тейеш һуң? Ул ике өлөштән тора.

1. Резюме, йәмәғәт эшмәкәрлеге тураһында мәғлүмәт; наградалар, маҡтау ҡағыҙҙары һ.б. 2.Уҡытыусының эше тураһында ата-әсәләрҙең, уҡыусыларҙың, коллегаларының отзывтары. Характеристика (аттестация осоронда 3-5 йылға бер яҙылырға мөмкин)

3. Һуңғы өс йылда башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән уҡыусыларҙың белем сифаты үҫешен түбәндәге таблица рәүешендә күрһәтергә:

| Уҡ. йылы | Класс | Уҡыусы | Административ контр.эш һөҙөмтәһе | | | | Белемде диагностикалау | Сирек һөҙөмтәләре | | | | Директ. урынбаҫ. иҫкәрмәһе | Уҡытыусының иҫкәрмәһе |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | I | II | III | IV | | I | II | III | IV | | |
| | | | | | | | | | | | | | |

4.Дәрестән тыш саралар һөҙөмтәләре буйынса таблицаны мәктәп һәм район күләмендәге сараларға айырым төҙөргә кәрәк:

| Уҡыу йылы | Класс | Уҡыусының фами | Предмет олимп | һөҙөмтә | Фәнни-эҙл. эше | һөҙөмтә | «Урал батыр» конк. | һөҙөмтә | Турнир | һөҙөмтә | Иҫкәрмә: дир. урынбаҫ., мәктәп |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|

| | | | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | лияһы | | | | | | | | | дир. |
| | | | | | | | | | | | |

5. Юғары уҡыу йортоноң филология, журналистика факультеттарында, йәки телгә бәйле өлкәләрҙә уҡып йөрөгән уҡыусылар исемлеге.

6. Уҡыусыларҙың яҡшы һәҙәмтәләр өсөн алған диплом, маҡтау ҡағыҙҙары, танытмаларҙың күсермәләре. Дәрестә, тәрбиәүи һ.б. сараларҙа төшкән фотолар.

Икенсе өлөштә уҡытыусының фәнни-методик хеҙмәттәре туплана:

1. Юғары органдарҙан килгән рекомендация хаттары.

2. Уҡытыусының педагогик концепцияһы. Педагогик уйланыуҙары (эссе).

3. (Һеҙ эшләгән методик теманы асыусы сығыштар, мәкәләләр, методик кәңәштәр, күрһәтмәләр.

4. Шәхси маҡсат һәм үҫеш мәсьәләләре сағылған һөнәри үҫеш планы түбәндә бирелгән таблица рәүешендә төҙөлә (3 йылға бер):

| Уҡыу йылы | Маҡсат һәм бурыстар | Курстар, саралар | Дата | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|
| 2012/2013 | 1) Башҡорт теле һәм әҙәбиәт дәрестәрендә яңы формалар бulланыуҙы өйрәнеү<br>2) Уҡыусының белемен баһалауҙа яңы алымдарҙы өйрәнеү<br>3) Информацион-технологияларҙы ҡулланыу<br>4)«БР халыҡтары телдәре тураһында»ғы Законға ҡарата норматив документтарҙы өйрәнеү<br>5)Аттестация үтергә әҙерләнеү<br>6)«Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы – 2012» конкурсына әҙерләнеү<br>7)…. | БМҮИ дистанцион курстары<br><br>Семинар -уҡыу<br><br>МҮИ аттестацион курстар үтеү | Йыл буйына | |

5. Дәрескә ҡарата төҙөлгән эштәр: тест, викторина, кроссвордтар, уйындар, контроль эш материалдары, БДИ-ға төҙөлгән эштәр.

6. Дәрес өлгөләре, яңы проекттар буйынса күргәҙмәләр

7. Уҡыу йылы аҙағында йыллыҡ эшкә анализ яһау. Ыңғай һәм кире яҡтарҙы билдәләп, киләһе уҡыу йылына бурыс – маҡсаттар ҡуйыла.

Йыл аҙағында портфолиоға тулы анализ яһала. Иң тәүҙә һөнәри үҫеш планы үтәлешен *маҡсат – бурыс – тормошҡа ашырыу ысулдары – һөҙөмтә* схемаһы буйынса анализларға кәрәк. Күптән инде портфолио ҡулланған Англия уҡытыусылары фекеренсә, ул үҙеңдең мәғариф өлкәһендәге ихтыяжыңды ҡәнәғәтләндерергә, методикала йомшаҡ яҡтарыңды асыҡлап, уның өҫтөндә эшләргә ярҙам итә.

Шулай итеп, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһының портфолиоһы эш барышында үҙләштергән оҫталыҡты дөйөм педагогик эшмәкәрлектә дөрөҫ ҡулланырға, уны юғары кимәлгә күтәрергә ярҙам итәсәк.

## Башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинетын

## йыһазландырыу

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинетын йыһазландырыуға берҙәм талаптар «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналының 2006 йылдың 12-се һанында сыҡҡан З.М.;Ғәбитованың мәҡәләһенә ярашлы төҙөлдө.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеты – уҡыусыларға белем һәм тәрбиә биреү үҙәге. Шуның өсөн дә кабинет, иң беренсе сиратта, дәрескә хеҙмәт итергә бурыслы. Унда булған техник саралар, уҡыу-уҡытыу методик әсбаптары, йыйылма материал – барыһы ла дәрескә әҙер булырға тейеш.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинетын музейға әйләндереү, стеналарға һүрәттәр төшөрөү уҡыусыларҙың иғтибарын ситкә йүнәлтә. Стеналарҙы артыҡ сыбарламай, зауыҡ менән эшләнгән бер нисә тематик стенд элергә һәм ундағы мәғлүмәттәрҙе, тематик материалдарҙы даимиалыштырып торорға кәрәк. Стендтарҙы түбәндәгесә урынлаштырырға мөмкин: кабинеттың алғы стенаһында, ғәҙәттәгесә, таҡта урын ала һәм уның өҫтөндә халҡыбыҙҙың күренекле шәхестәре, яҙыусы һәм шағирҙарының туған тел хаҡында әйтелгән фәһемле һүҙҙәре яҙыла. Таҡтаның һул яғында – алфавит (башҡорт мәктәптәре һәм гимназиялары икенсе тематика менән стенд һайлай ала, мәҫәлән, «Юбилейҙар»), уң яғында «Бөгөн дәрестә» стенды. Кабинеттың бер яҡ стенаһында тәрәләр булһа, икенсе яғына ике-өс стенд ҡуйыла: 1). « Тыуған яғым»; 2). «Иҫтәлекле даталар»; 3). Синыф мөйөшө (уҡытыусы стенд тематикаһын үҙгәртә ала). Кабинеттың артҡы өлөшөндә шкафтар урынлашһа, стендтарҙы ҡуймаҫҡа ла мөмкин. Шкафтарға күргәҙмәлектәр анығ бер система менән урынлаштырыла. Артыҡ иҫке ҡағыҙҙан, ситтәре ашалып бөткән үткән быуат таблицаларынан арынырға кәрәк. Улар кабинетты йәмһеҙләп кенә ҡалмай, туҙан йыйып, гигиена талаптарын боҙоуға килтерә.

I. Кабинетта булырға тейешле документтар исемлеге:

1. «Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында»ғы Закон, «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында»ғы Закон.
2. Рәсәй Федерацияһының, Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында»ғы Закондары.
3. «Милли мәғарифты үҫтереү концепцияһы».
4. 2003-2012 йылдарҙа «Башҡортостан халыҡтары» дәүләт программаһы.
5. Ағымдағы уҡыу йылына синыф кабинеты асыу тураһында приказ.
6. Кабинет мөдирен тәғәйенләү тураһында приказ.
7. Кабинет мөдиренең эш планы.
8. Кабинеттағы техник саралар, күргәҙмәлелек, дәреслектәр, методик ҡулланмалар, дидактик материалдарҙы һ.б.теркәлгән кабинет паспорты.

9. Кабинетта хәүефһеҙлекте һаҡлау ҡағиҙәләре. Техник хәүефһеҙлекте һаҡлау ҡағиҙәләре, инструктаж журналы.
10. Кабинеттың киләсәккә үҫеш планы.
11. Ағымдағы уҡыу йылына мәғариф программаһын тормошҡа ашырыуға синыф-кабинеттың әҙерлеге тураһында мәктәп, методик комиссияһы ҡарары.
12. Инвентарҙы иҫәпкә алыу китабы, норматив документтар, уҡыу ҡулланмалары каталогы, булған техник саралар ҙың иҫәбе, видео-яҙмалар исемлеге, методик картотека.

II. Кабинет китапханаһы: диктант һәм изложение йыйынтыҡтары; белешмәләр; художестволы әҙәбиәт; һәр синыфҡа синыфтан тыш уҡыу өсөн әҙәбиәт исемлеге; башҡорт телендә сыҡҡан гәзит-журналдар төпләмәләре; лексик, грамматик һәм башҡорт теленең орфографик һүҙлектәре; башҡортса-русса, русса-башҡортса һ.б. һүҙлектәр; электрон дәреслек һәм һүҙлектәр; уҡытыусылар өсөн методик ҡулланмалар; лексик һәм грамматик таблицалар; алфавит; яҙыусы һәм шағирҙарҙың, күренекле шәхестәрҙең, ғалимдарҙың портреттары; индивидуаль эш өсөн таблицалар һәм тематик карточкалар, папкалар; асыҡ дәрес һәм сараларҙың өлгөләре; темалар һәм эш төрҙәре буйынса тәғәйенләп конверттарға һалынған таратма материал; күргәҙмәлелек (һаҡлау өсөн уңайлы булыуҙы күҙ уңында тотоп, алфавит тәртибендә йә төрҙәр менән билдәләп урынлаштырыла).

Уҡыусыларҙың докладтары һәм өлгөлө ижади эштәрен, әҫәргә иллюстрациялар, яҙыусы, шағир һәм күренекле шәхестәрҙең ижады буйынса материалдар тупланған махсус папкалар.

III.Башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу өсөн өҫтәлмә материалдар: тематика буйынса төҙөлгән тестар, өҫтәлмә һәм белешмә әҙәбиәт менән эшләү өсөн иҫкәрмәләр; статистик мәғлүмәттәр; тематик һәм сюжетлы һүрәттәр; һүрәт һәм фоторәсемдәр тупланған альбомдар; яҙыусылар, шағирҙар, рәссамдар, тел һәм әҙәбиәт өлкәһендәге премия лауреаттары ижадына бағышланған раскладушкалар.

IV. Уҡыусыларҙың ижади һәм үҙ аллы эштәре буйынса материалдар:эш төрҙәре, тестар, иҫкәрмәләр, белешмәләр, рефераттар, энциклопедиялар, ижади эштәр өлгөләре.

V. Предмет буйынса синыфтан тыш эштәр өсөн кәрәкле материалдар: түңәрәк, факультатив эштәре өсөн материалдар, олимпиада, конкурс, викторина, КВН, аҙналыҡ, декадник һәм темалар буйынса системалаштырып тупланған материалдар, практик эштәр өсөн текстар, иҫкәрмәләр, башҡарылған эштәрҙең өлгөләре, предмет буйынса экскурсия үткәреү өсөн эш төрҙәре һәм материалдар.

VI. Техник саралар: телевизор, видеомагнитофон, компьютер. Тауышлы әсбаптарҙан: аудио-яҙмалар, тыңлау һәм ҡабатлау өсөн текстар, әҙәбиәттән фонояҙма һәм фонохрестоматиялар; экран әсбаптарынан: электрон дәреслектәр, уҡыу фильмдары, видео-яҙмалар.

VII. Кабинетты дәрескә йыһазландырыуға уҡыусыларҙы йәлеп итеү мотлаҡ. Талаптар: зауыҡ менән заманса, бөхтә, үтеләсәк материал менән тап килерлек.

VIII. Кабинеттың эш тәртибе: дәрестәр һәм факультативтар теҙмәһе, һәләтле балалар, насар өлгәшкән уҡыусылар менән шөғөлләнеү ваҡыты, консультациялар ваҡыты һ.б. яҙып элене.